## Донъяла

**ТӨРКИӘЛӘ ФӘТИХ МӘСЕТЕН ҠАЙТАНАН ТӨҘӨҮ ТАМАМЛАНДЫ.** Был изге йорт Осман хәлифәтенең етенсе хәлифе Солтан Мехмед хан тарафынан төҙөлгәйне.

Биш йыл буйы төҙәкләндерелгән Фәтих мәсете Константинополде алыу көнөндә ҡайтанан асылды. Был ҡурҡәм байрам Константинополде яулап алыуҙың 559 йыллыҡына тура килде. Мәсеттә асыу тантаһында Төркиәнең премьер-министры Рәжәп Тайип Эрдоган ҡатнашты.

Истамбул фонды директоры Ибраһим Озекинжи Фәтих мәсетенең элек насрани сиркәүе торған урында 1462-1470 йылдарҙа архитектор Аттик Синан тарафынан төҙөлгәнен әйтте.

Озекинжи Мөхәммәд пәйғәмбәрҙең хәҙисен иҫкә төшөрҙе: "Истамбул мотлаҡ алынасаҡ. Был ҡаланы алыусы полководец ниндәй гүзәл һәм ниндәй гүзәл уның яугирҙәре!" Был һүҙҙәр менән ул пәйғәмбәр атаған полководецтың Солтан Мехмед икәнен белдерҙе.



**АЛДАҒЫ УН ЙЫЛ ЭСЕНДӘ ИСЛАМ ДОНЪЯҺЫНДА БӨЙӨК АҠЫЛ ЭЙӘЛӘРЕ ҮҪЕП СЫҒАСАҠ.** Үҙәк Азия үҙен Ислам донъяһындағы иң интеллектуаль үҙәк тигән исемде ҡайтарасаҡ һәм бер ун йылдан унда донъя кимәлендә фекер йөрөтөүсе Ислам ғалимдары үҫеп сығасаҡ. Танылған Америка ғалимы, Ислам фәлсәфәһе белгесе, Джордж Вашингтон исемендәге Университеттың Ислам ғилеме буйынса профессоры Сәид Хөсәйен Наср шундай һығымта яһаны. "Интеллектуаль йәһәттән ҡарағанда, бер тиҫтә йыл кәрәк булыр, тип уйлайым, һәм Үҙәк Азияла бөтөн доняға танылаҫаҡ Ислам ғалимдары ҡалҡып сығасаҡ, улар ысын фекер эйәләре буласаҡ, уларҙың хеҙмәттәрен Ҡаһирәлә, Тегеранда ғына түгел, башҡа урындарҙа ла өйрәнәсәктәр. Был мотлаҡ шулай буласаҡ" тип белдерҙе Наср үҙенең Юғары мәктәптең Пол Нитце исемендәге Халыҡ-ара тикшеренеү эргәһендәге Үҙәк Азия һәм Кавказ институтындағы сығышында.

Гарвард университетында һәм Массачусес технологик институтында белем алған Наср АҠШ-ка күсенгә тиклем Теһерандағы Шәриф университетында президент вазифаһын биләне. Ул 50-нән артыҡ монография һәм китаптар авторы, Көнбайышта ла, Ислам донъяһында ла иң танылған философ.

Наср Үҙәк Азияның Ислам цивилизацияһында элек иң ҙур үҙәк булып тороуын һәм уның кешелеккә Әл-Бируни, Ибн-Сина, Хорезми, Рудаки кеүек мәшһүр шәхестәрҙе биреүен һыҙыҡ аҫтына алды. "Үҙәк Азия Ислам донъяһының ҡырый өлөшө түгел. Ул фән һәм сәнғәттең иң бөйөк үҙәге булып торҙо. Үҙәк Азияла Ислам донъяһын кешелеккә танытҡан сәнғәттең, фекерҙең, фәлсәфәнең, шиғриәттең, фәндең гүзәл өлгөләре ижад ителде. Алдағы 10-20 йыл эсендә ул ҡабаттан аяҡка баҫасаҡ. Иран менән бәйләнеше лә ныҡый ғына барасаҡ. Һис шикһеҙ шулай буласаҡ", - тине Наср.

## Нуран

# Йәннәт

Йәннәттә мосолмандың йәне нимә теләһә, шул мәлдә үк теләгәне ҡабул буласаҡ.

Ерҙәге тормошта кешенең берәй татлы ризыҡ татып ҡарағыһы килһә, ул быныӊ өсөн күп көс һәм ваҡыт сарыф итергә тейеш. Әммә, күҙ алдына килтерегеҙ, бер ниндәй ҙә көс түкмәйенсә, һеҙҙең уйлауығыҙ була, шул уҡ мәлдә теләгән ризыҡтарығыҙ алдығыҙҙа хасил була. Әлбиттә, ерҙәге шарттарҙа, бындай күренеш мөмкин түгел. Әммә Аллаһ Үҙенең тоғро ҡолдарына вәғәҙә иткән Йәннәт баҡсаларында, һатыу - һатып алыу, ваҡыт, көс сарыф итеү һәм башҡа эштәр эшләү кәрәк түгел, йәнең нәмә теләһә, шул нәмәләрҙең барыһы ла әҙер хәлдә, иң гүзәл эстетик күренештә хасил буласаҡ, шулай итеп, Аллаһы Тәғәлә иман килтергәндәрҙе шатландырып торасаҡ.

Бер хәҙистә былай тип иҫкә алына: "Йәннәттә йәнең һинең ҡош ите теләр. Һәм шул уҡ мәлдә һинең алдыңда яңы ғына ҡурылған ҡош ите хасил булыр". (Ҙур хәҙистәр йыйынтығы, 5-се том, 414.10123се бит).

Бер хикәйәттә Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәдтең (с.ғ.с.) ошондай хәҙисе килтерелә: "...Кемдендер көтмәстән ҡош ите ашағыһы килер, һәм шул мәлдә үк уның ҡаршыһында ҡош итенән әҙерләнгән бик күп төрлө ризыҡтар хасил булыр. Һәм Йәннәт әһелдәре күпме теләһәләр, шул саҡлы ризыҡланырҙар. Инде улар ризыҡланып туйғандан һуң, ҡоштарҙың бөтөн һөйәктәре яңынан йыйылып, ҡош булып терелеп осоп китерҙәр һәм тағы ла Йәннәт болондарында көтөү - көтөү булып йөрөрҙәр". (әт - Тәзкирәт әл - Куртуби, 58-се бит).

Хәҙистә бәйән ителеүенсә, Йәннәттә һәр кем, тик ҡәнәғәтлек кисереү өсөн генә ниндәй ҙә булһа шөғөл менән булыша ала, әммә ерҙәге һымаҡ был шөғөлдәр көс түгеүҙе талап итмәй. Миҫал өсөн, Йәннәттә мосолман ер эшкәртеү менән шөғөлләнә ала, әммә хеҙмәттән ҡәнәғәтлек һәм шатлыҡ кисерер өсөн генә.

П ә й ғ ә м б ә р е б е ҙ Мөхәммәдтең (с.ғ.с.) даланан килгән бер кеше менән Йәннәт тураһында ошондай һөйләшеүе хаҡында әйтелә:

ХӘҘИС: "Берәр кеше Йәннәттә үҙенең Раббыһына ер эшкәртеү менән шөғөлләнеү теләгән әйтер һәм Уның рөхсәтен һорар. Раббыһы уға әйтер: "һин әллә үҙең теләгән тормошҡа ирешмәнеңме?".

Кеше яуап бирер: "Эйе, дөрөҫлектә нәҡ шулай. Әммә мин ер эшкәртеү менән шөғөлләнергә яратам". Шул саҡ уға рөхсәт бирелер, ул шул мәлдә үк орлоҡтар сәсер, һәм орлоҡтар шул мәлдә үк шытып сығырҙар, үҫеп етерҙәр, мул уңыш бирерҙәр: кеше уларҙы урыр һәм елгәрер, йыйған ашлыҡтары тау-тау булып ятыр..." (әл-Бухари, Ҙур хәҙистәр йыйынтығы, 5-се том).

***(Дәүләкән мәсете материалдарынан).***

# КӨН ХӘҘИСЕ



Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд (с.ғ.с.) шулай тигән:

*"Кем дә кем мосолманды был донъяның берәй ҡайғыһынан ҡотҡара, Аллаһы Тәғәлә шул кешенең үҙен Хөкөм көнөндә берәй ҡайғыһынан ҡотҡарыр, кем дә кем бурыслының бурысын ҡайтарырға ярҙамлаша, Аллаһы Тәғәлә был донъяла ла, теге донъяла ла шул кешенең хәлен еңеләйтер, кем дә кем мосолманды аяй, Аллаһы Тәғәлә шул кешене был донъяла ла, теге донъяла ла аяр, һәм кем дә кем үҙ кәрҙәшен ярҙамынан ташламай, Аллаһы Тәғәлә лә шул колон Үҙ ярҙамынан ташламаҫ. Аллаһы Тәғәлә ғилем эҙләү юлына баҫҡан кешенең Йәннәткә барыу юлын еңеләйтер, ә Аллаһтың Китабын уҡыр, өйрәнер өсөн Аллаһ йортона йыйылыусыларға тыныслыҡ бирер, уларға Раббыларының мәрхәмәте төшөр, уларҙы фәрештәләр уратып алыр һәм Аллаһы Тәғәлә уларҙы Үҙенең ҡашында торғандар менән бер ҡатар иҫкә алыр"* (Әбү Һурәйрә килтергән хәҙис).

## Ғәмәл менән үлсәнер юл

Шәйех Ибн Усман шулай тигән: "Аллаһы Тәғәләнең: "Әйт: "Һеҙ ҡасып китеп барған әжәл - мотлаҡ һеҙҙе ҡаршы алып торасаҡ", тигәнен күңелеңә һалып ҡуй". Ул: "Әжәл мотлаҡ һеҙҙе ҡыуып етәсәк", - тип әйтмәгән. Шулай булғас, ҡасып ҡотолорға маташҡан нәмәнең һине ҡаршы алып тороуы тураһында нимә уйлайһың. Был һинең үлемдән ҡасыуың - уға яҡынлашыуың тигәнде аңлата, һәм ни тиклем шәберәк ҡасырға тырышаһың, шул тиклем үк уға яҡыная бараһың".

## Уныһы бөртөктәре

Рәшит ШӘКҮР

Иң әүүәле Аллаһыбыҙ һүҙ биргәндер,
Һүҙҙе һүҙгә теҙер өсөн тел биргәндер;
Һүҙе барҙың үҙе бар, тип, күҙе бар, тип,
Һәр ҡәүемгә ерҙе бүлеп, ил биргәндер.

*18.04.2001.*

Яҙмыштарға яҙылғандыр барыһы ла,
Барҙыр унда ағы ла һәм ҡараһы ла;
Мең-мең төргә керә ана күк көмбәҙе
Аҡ менән ҡар тоҫ араһында.

*14.04.2001.*

Эсмә, кешем! Эсмә дуҫым! Эсмә берүк!
Эскелектең һаҙлығына төшмә берүк!
Эскелек ул - иманһыҙлыҡ ғәләмәте,
Иманһыҙлыҡ юлына һин күсмә берүк!

*15.04.2004.*

Эй Хоҙайым, оңҡотлоҡтан һакла илде,
Етлекмәгән егеттәрҙән якла илде!

* * *

Эй ғүмерҙәр... аҡҡан һыу ғына,
Беҙ аңлайбыҙ быны һуң ғына.
Тек-тек ана, тек-тек тама секундтар,
Секундтарҙы йыя минуттар.
Аға һыуҙар. Аға туҡталмай,
Ваҡыт арғымағы йокламай.

*12.02.2006.*



## Кескәйҙәргә уҡығыҙ

# ИҢ МАТУР ҺҮҘ

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА



Инә бесәй балаһын янына саҡырҙы: "Мяу!" Бесәй балаһы йүгереп килде лә иркәләнергә кереште. Бесәйҙәрҙең матур һүҙе бар, тип уйланы Рәфил. Шулай булмаһа, бесәй балаһы ҡыуаныр инеме ни? Рәфил үҙе лә күп һүҙ белә. Ә кешеләр өсөн ҡайһыныһы иң матуры икән? Хәҙер генә әсәһенән һорар ине, тик ул ауырып тора. Шуға малайға күңелһеҙ ине. Ул һүрәт төшөрә башланы.

- Әсәй! - тине бер аҙҙан малай. - Был ҡояш - һин!

- Һүрәтең бик матур, улым. Мин ҡояш булғас, ни өсөн ҡулымда йондоҙҙар тотоп торам? - тип һораны әсәһе.

- Йондоҙҙар - беҙ бит! Һинең балаларың! Ә һин беҙҙең өсөн көндөҙ ҙә, төнөн дә - ҡояш. Гел янымыҙҙа, гел яҡты, йылы, йомарт...

Әсәй көлөп ебәрҙе лә улының арҡаһынан һөйҙе.

- Рәхмәт, улым! - тине ул.

Ниндәй матур һүҙ ул рәхмәт! Хатта бесәй балаһы ла "Мяу!.." тип уға килеп һыйынды. Әсәһе лә терелде. Рәхмәт һүҙе дауа ла икән! Бынан һуң Рәфил Әсәһенә ярҙам итер. Үҙе лә был матур һүҙҙе әсәһенә йышыраҡ әйтәсәк. Сөнки әсәһе өйҙәгеләргә яҡшы булһын өсөн бөтәһен дә эшләй бит. Рәхмәт һиңә, әсәй!

Рәхмәт - иң кәрәкле һүҙ. Ул кешене көслө итә, уға аҡыл бирә, дуҫлыҡты нығыта. Был матур һүҙ балаларға тиҙерәк үҫергә, ҙурайырға ярҙам итә.

## Тәрән фекер

"Изге Мәрйәм ана барлыҡ һүрәттәрҙә лә хижабта төшөрөлгән икән, нисек итеп мин хижабты тыйыу тураһындағы законға ҡул ҡуя алам?" Италияның эске эштәр министры Роберто Марони хижабҡа ҡаршы көрәшеүселәргә шулай тип яуап бирә.

* * *

Имам Әхмәд ибн Ханбалдың улы Абдулла бер мәл атаһынан ошолай тип һорай: "Ҡасан беҙ ял итербеҙ һуң?" Уның атаһы, мәшһүр имамдарҙың береһе, барлыҡ мосолмандар өсөн үрнәк шәхес, улының күҙенә ҡарай ҙа шулай тип яуап бирә: "Йәннәткә ингән тәүге аҙымыбыҙҙан уҡ".